# Минең Башҡортостаным!

*Ер шарының картаһына*

*Ҡараһаң якшы ғына, —*

*Шул картала Башкортостан*

*Бер япраҡ саҡлы ғына...*

тип яҙған беҙҙең яратҡан яҙыусыбыҙ, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим. Ысынлап та, картала Башҡортостан ҡайын япрағына оҡшап тора. «Ә ҡайыны шундай бөйөк, юғары»,— тип, шағир Рәсәйҙе ҡайын ағасы менән сағыштыра.

Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ бәләкәй генә булһа ла, ниндәй генә хазиналар юҡ унда! Ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары ғына ла үҙе ни тора.Беҙҙең илдә бик күп күлдәр, йылғалар, тауҙар, урмандар бар. Күлдәрҙә һәм йылғаларҙа балыҡтарҙың төрөн һынап бөтөрлөк түгел. Урмандары төрлө-төрлө емеш-еләк менән бай. Көҙгөһөн күп бәшмәктәр үҫеп сыға. Башҡортостанда бөтә районларҙа ла төрлө хайуандар йәшәй.

Беҙҙең Башғортостаныбыҙҙа 54 район һәм 21 ҡала. Башҡортостандың баш ҡалаһы- Өфө. Өфө бик бороңғо, ҙур һәм матур ҡала. Өфөлә матур йорттар төҙөлә. Театрҙарҙа, кинотеатрҙарҙа ҡыҙыҡ фильмдар, спектаклдәр күрһәтәләр.Өфө ҡалаһында бик күп парктар, скверҙар бар. Парктарҙа ҡыҙыҡлы аттракциондар бар. Көн дә балалар әсәйҙәре, атайҙары менән парк буйлап йөрөйҙәр, ял итәләр.

Көҙ көндәрендә Башҡортостан бигрәк матур була. Ағастарҙың япраҡтары төрлө төҫкә инә: һары, ҡыҙыл, ҡыҙғылт-һары, көрән...

Башҡортостанда төрлө милләт кешеләре йәшәй. Иң күбеһе башҡорттар, татарҙар һәм рустар. Хәҙер ауылдарҙа, ҡалаларҙа күп кенә башҡорт мәктәптәре, гимназиялар күп. Унда башҡорт балалары уҡый.

Беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың әҙәби мираҫы ҙур. Башҡорт халыҡ ижады ун һигеҙ том булып баҫылып сыҡҡан. Яратҡан шағирҙарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ күп. Улар матур әҫәрҙәр, шиғырҙар, әкиәттәр яҙалар.

Беҙҙең Башҡортостан мәҙәни яҡтан да бай. Йырсылар, рәссамдар, музыканттар, композиторҙар, бейеүселәр, спортсылар күп.

1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителде. Хәҙер беҙҙең үҙ байрағыбыҙ, үҙ гербыбыҙ бар.

Башҡортостаныбыҙ бик ҙур, матур һәм бай республика. Мин шундай изге ерҙә йәшәүемә ғорурланам!

Ҡыуатова Камила,
5А класс уҡыусыһы.